# Урал батыр

## Башҡорт халыҡ эпосы

### 7-се бүлек

Һарайға Һомай ҡайтҡас,
Зәрҡум янына төшкәс,
Шүлгән бынан шомланған;
Зәрҡум серҙе асыр, тип,
Миңә бәлә тағыр, тип;
Нисек булһа, юл табып,
Урал таяғын алып,
Барыһын һыуҙан баҫтырып,
Ҡыран-яран итергә;
Аҡбуҙатҡа менергә,
Һомайҙы ла алырға,
Әзрәҡәгә китергә,-
Тиеп Шүлгән уйлаған.
Шул урында Уралға
Былай тип ул һөйләгән:
"Мин дә бер дан табайым,
Әзрәҡәгә барайым,
Илен баҫып алайым",-
Тип, таяғын һораған.
"Икәү бергә барайыҡ,
Бергә йөрөп ҡарайыҡ",-
Тигән Урал Шүлгәнгә.
Шүлгән быға күнмәгән,
Урал таяҡты биргән,
Һомай ямдан сыҡкансы,
Зәрҡум менән һөйләшеп,
Бөтә серҙе белгәнсе,

Шүлгән таяҡ алғас та,
Һомайҙы ла көтмәйсе,
Айһылыуҙы күрмәйсе,
Самрауға әйтмәйсе,
Бер яҡ ҡырға сыҡҡан да,
Таяҡты бер һуҡҡан да,
Барыһын һыуҙан баҫтырған,
Һәләкәткә ҡалдырған.
Зәрҡум быны күргәс тә,
Ҙур бер балыҡ булған да,
Янына барған Һомайҙы
Шул урында ҡарпыған.
Зәрҡум ҡыҙҙы ҡарпығас,
Күктә ҡояш тотолған,
Быны Аҡбуҙ белдергән,
Аҡбуҙ даръяға сумған,
Даръя гөрләп ҡайнаған,
Һомайҙың да юҡлығын
Барыһы ла анлаған.
Аҡбуҙ даръяны быуғас,
Зәрҡумға юл булмағас,
Һомайҙы ул ебәргән,
Зәрҡум үҙе тотолмай,
Ҡаса һалып өлгөргән,
Һомай кире ҡайтҡан һуң,
Бөтә серҙе әйткән һуң,
Урал эште аңлаған,
Дошман булды ағам, тип,
Үҙ эсенән уйлаған.
Бөркән һыуы ҡороғас,
Зәрҡум барып ҡушылғас,
Аҡбуҙатҡа ҡаршы
Таяҡ көсө етмәгәс,
Зәрҡум, Шүлгән киткән, ти,

Әзрәҡәгә еткән, ти,
Бөтә серҙе әйткән, ти.
Әзрәҡә бик ҡайғырған,
Дейеүҙәрен йыйҙырған,
Һарайға һаҡ ҡуйҙырған.
Ҡәһҡәһә менән Шүлгәнде,
Зәрҡум, дурт-биш дейеүҙе
Ғәскәренә баш ҡылған.
Күктә ҡоштар осмаҫлыҡ,
Ерҙә кеше йөрөмәҫлек,
Ерҙе һыу менән ҡапларға,
Күкте ут менән ялмарға
Бар дейеүгә бойорған.
Берҙән-бер көн бар ерҙә
Күк-күмгәк һыу эркелгән,
Күк йөҙөндә ҡып-ҡыҙыл
Ялҡынлы ут бөркөлгән.
Күктә ҡош-ҡорт осалмай,
Ерҙә бер йән торалмай,
Аптыраған, алъяған;
Ҡошо-ҡорто, йәнлеге
Йылан батша ерендә
Бары бергә йыйылған,
Уралға килеп ялбарған.
Урал ҡаушап ҡалмаған,
Ерҙе баҫҡан һыуҙан да,
Күк ҡаплаған уттан да
Бер ҙә ҡурҡып тормаған, -
Менеп алған Буҙ атын,
Ҡулына тотҡан булатын,
Дейеү батшаға ҡаршы
Ҡанлы һуғыш, яу асҡан.
Ай һуғышҡан, ти, Урал,
Йыл һуғышҡан, ти, Урал,

Утҡа етергә бирмәгән,-
Ҡайыҡ яһап, бар кеше
Һыуға батып үлмәгән.
Урал аяуһыҙ һуғышып,
Дейеүҙәрҙе ҡырған, ти;
Шул саҡлы улар үлгән, ти, -
Киң дингеҙҙең өҫтөндә
Тау барлыҡҡа килгән, ти.
Аҡбуҙ һыуҙы йырған, ти,
Юлы ҡалҡып ҡалған, ти;
Урал ярған юлдарҙан
Халыҡ эйәреп барған, ти.
Көн һуғышҡан, ти, Урал,
Төн һуғышҡан, ти, Урал.
Ҡаты яуы барғанда,
Дейеүҙәрҙе ҡырғанда,
Әзрәҡәгә тап булып,
Икәүһе ҡаршы тороп,
Ҡылысҡа ҡылыс килеп,
Һуғышҡандар, ти, былар,
Алышҡандар, ти, былар.
Әзрәҡә сабып ҡараған,
Ут та бөркөп ҡараған;
Уралды ул сапҡанда,
Күк күкрәп торған, ти;
Уралға ут бөркҡәндә,
Һыуҙар ҡайнап торған, ти,
Ерҙәр тетрәп торған, ти.
Урал ҡаушап ҡалмаған,
Һушынан да таймаған, -
Булат ҡылысын алған да,
Әзрәҡәне өҙә сапҡан да,
Тураҡлаған, онтаған,
Ҡылысы диңгеҙгә сумған,

Ер һелкенгәндәй булған:
Әзрәҡә йәнһеҙ йығылған,
Имәнес ҙур кәүҙәһе
Һыуҙы урталай бүлгән;
Халыҡҡа менеп йөрөргә,
Йәйрәп хәл йыйырға
Ҙур бер яман тау булған.
Урал алға сапҡан, ти,
Аты диңгеҙ ярған, ти;
Аҡбуҙ барған урында,
Һыу алмаҫлыҡ юл булып,
Ҙур тау ҡалҡа барған, ти;
Һыу эсенән бар халыҡ
Шунда сыға барған, ти.
Урал күп йыл һуғышҡан,
Күп дейеүҙәрҙе ҡырған,
Күп тау барлыҡҡа килгән;
Урал яуға сыҡҡанда
Яңы тыуған балалар
Ат менерҙәй ир булған.
Урал барған ер буйлап,
Һыҙылып ятҡан тау буйлап
Яҡшы толпар атланған,
Яу батырҙай ҡораллы
Дүрт йәш батыр килгән, ти;
Улар артынса дүртәү
Ҡалышмайсы елгән, ти,
Килеп сәләм биргән, ти.
Беренсеһе:
"Ҡатил батша ҡыҙынан
Һинән тыуған улыңмын;
Һигеҙ йәштә ат мендем,
Ил аралап күп йөрөнөм,
Ҡыуам һинең юлыңды, ти.

Бер ерҙә бер ҡан күрҙем -
Үҙе ергә һеңмәйҙер,
Үҙен ҡоҙғон эсмәйҙер;
Йыртҡыс, ҡоҙғон йыйылып,
Көн дә килеп еҫкәйҙер.
Әсәмә ҡайтып һөйләнем,
Бар серене һораным;
Әсәм миңә әйтмәне,
Ултырып үкһеп иланы,
Ни әйтергә белмәнем,
Аптыраным-алъяным,
Серенә төшөнмәнем.
Ил аралап күп йөрөнөм,
Күп кешеләрҙе күрҙем,
Йәшен-ҡартын осраттым,
Ҡан турында һораштым.
Береһе асыҡ әйтмәне,
Былай тиеп һөйләне:
"Атаң беҙгә тәңреләй
Ярҙам итте, балаҡай,
Атаң хаҡын һаҡлайбыҙ,
Әсәң хәтерен ҡаҡмайбыҙ,
Һин - атаңдан ҡот йыйған,
Һин - әсәңдән һөт имгән,
Уларға уртаҡ бала һин,
Беҙгә дана бала һин.
Әсәңдән үтеп, балаға
Уртаҡ серен әйтмәбеҙ:
Атаң ҡәҙере хаҡына
Әсәңә ант иткәнбеҙ.
Бар, балаҡай, ҡайт, бала,
Әсәңдән һорап күр, дана,
Әсәң әйтһә бар серен,
Үҙең уйлап бел, бала," -

Тигәс, ҡайттым өйөмә,
Тағы баҡтым әсәмә,
Әсәм һис тә әйтмәне,
Минән серен йәлләне.
Мин ултырып иланым,-
Ул һаман да әйтмәне,
Урын һалып ятҡырҙы,
Йоҡлатырға бәпләне.
Мин дә һүҙен тыңланым,
Мин йоҡлаған булайым,
Ни һөйләр тип уйланым.
Мине йоҡлай типмелер,
Әллә онотопмолор,-
Әсәм үкһеп иланы,
Башын баҫып уйланды,
Ошолай тип һөйләнде:
"Уралым китте - юғалды,
Ҡабат ҡайтып килмәйҙер;
Улы етте - ат менде,
Уны атаһы белмәйҙер.
Атаһындай тыуғандыр,
Йөрәге ҡуш булғандыр.
Яуыз атам ҡандары
Әле шиңмәй яталыр,
Бала, күреп ҡайта ла,
Һорашып ҡаңғырталыр.
Инде нисек итәйем,
Әйтмәй нисек түҙәйем?
Әйтһәм, серҙе белер ул,
Атаһыны эҙләр ул,
Башын ситкә аҙҙырыр,
Мине яңғыҙ ҡалдырыр",-
Тип, әсәйем зарланғас,
Мин дә торҙом, таң атҡас.

Ҡан янына барҙым мин,
Ҡанды урап йөрөнөм мин:
"Әй, һеҙ ҡандар - ҡан икән,
Атам ҡойған ҡан икән;
Атам Урал тигәнгә,
Яу асҡандар һеҙ икән,
Батыр ҡулы тейгәнгә
Һыуынмаймы ҡанығыҙ,
Шуға тынмаймы йәнегеҙ?
Ҡанығыҙ бысраҡ булғанға,
Ҡоҙғон да эсмәй, ер йотмай,
Күпсеп ята ҡанығыҙ,
Йонсоп ята йәнегеҙ", -
Тигән һүҙем әйткәйнем,
Ҡанлы был күл ҡайнаны;
Ҡан күленән ситтәрәк
Бер аҡ ташҡа сәсрәгәс,
Ҡан ҡыймылдай башланы,
Серҙе һөйләп ташланы:
"Оло бабаң Ҡатилдың
Ҡоллап алған дүрт батыр,
Бабаң ҡушҡас, яу астыҡ,
Яуыз ҡанға олғаштыҡ.
Ер ҙә эсмәй ҡаныбыҙ,
Көн киптермәй ҡаныбыҙ,
Ҡоҙғондарҙы һорайбыҙ,
Улар ҙа эсмәй ҡаныбыҙ,
Өҙгөләнә йәнебеҙ.
Урал атаңа бар әле,
Беҙҙең зарҙы әйт әле:
Сара тапһын, терелтһен,
Уҙенә юлдаш булырлыҡ
Яуға сабыр ир итһен", -
Тигәс, серҙе белдем мин,

Әсәмә һөйләп бирҙем мин.
Әсәм уйлап торҙо ла,
Тауға ҡарай барҙы ла,
Ҡоҙғондарҙы йыйҙы ла,
Бер ҡоҙғондо оҙатты,
Һәр көн сығып күҙәтте.
Бер талай көн уҙғас та,
Ҡоҙғоно килде шау менән,
Ауыҙы тулы һыу менән.
Әсәм ҡанға төкөрттө, -
Барыһын да терелтте.
Дүрт батырға ҡарата:
"Атамда хур булһағыҙ,
Унан этлек күрһәгеҙ,
Уралға дуҫ булһағыҙ,
Атайымдың дуҫтарын
Донъянан юҡ итегеҙ;
Улым менән Уралды
Эҙләп бергә китегеҙ,
Барып сәләм әйтегеҙ".
Дүрт батырҙы эйәртеп,
"Атам - Урал икән, тип,
Урал улы - Яйыҡ", тип,
Һиңә юлдаш булайыҡ, тип,
Алыҫтан эҙләп килдем мин,
Һиңә ярҙам итергә
Билем биштән быуҙым мин,
Һинең юлды ҡыуҙым мин".
Икенсеһе:
"Минең әсәм - Гөлөстан,
Мин алтыға еткәндә,
Йылан, Шүлгән ҡабатлап
Илде талай килгәндә,
Бар кешенең ҡото осоп,

Илдән ҡасып киткәндә,
Әсәм һине уйлаған,
Шул ҡайғынан ҡалғыған.
Аяғына баҫалмай,
Урынында ятҡанда,
Илдә йылан яу аҫты,
Бөтә ерҙе һыу баҫты.
Балаһына, ҡартына
Ҡайыҡ яһап барыһына.
Барын тейәп ҡайыҡҡа,
Яңғыҙ үҙем яу астым.
Яуҙа илде бирмәгәс,
Һыуҙа берәү батмағас,
Үҙем йәш бер балалай
Күҙҙәренә сағылғас,
Зәрҡум килеп туҡталды,
Ҡылыс алып уҡталды.
Мин да ҡарап торманым,
Балаһынып ҡалманым:
Ҡылыс алып айҡаштым,
Уға һис көс бирмәнем,
Ул һуҡҡанда йығылмай,
Батырҙарҙай сайҡаштым.
Зәрҡум бик ужарланғас,
Уны яҡлап дейеүҙәр
Тағы өҫтәлеп уҡталғас,
Унда ла көс бирмәнем,
Дейеүен да, Зәрҡумды ла
Быуын-быуын тураным.
Хәлһеҙләнгән көйө тороп,
Әсәм килеп ҡул һалды,
Йәшләндереп күҙҙәрен
Былай тиеп һөйләнде:
"Атаң - Урал батырым,

Унан тыуған Нөгөшөм,
Батыр булып тыуғанһың,
Атаңа ҡулдаш булғанһың.
Мен толпарға һин, балам,
Атаңа юлдаш бул, балам!" -
Тиеп әсәм, һөйҙө лә,
Толпар тотоп бирҙе лә,
Миңә юлды өйрәтте,
Мине яуға оҙатты".
Өсөнсөһө:
"Минең әсәм -Һомайҙыр,
Көндә күккә менә лә,
Нимәнелер тыңлайҙыр.
"Ай Уралым, нишләйһең?
Мин янамын - белмәйһең;
Дейеү-ендәр тупланды,
Бары бергә йопланды, -
Ил ҡаплаған диңгеҙҙе
Нисек йөҙөп сығырһың?
Ҡан дулаған дейеүҙе
Нисек еңеп сығырһың?" -
Тип, аһ ороп ялбарҙы,
Үҙ алдына зарланды.
Миңә текләп торҙо ла,
Бер көрһөнөп алды ла:
"Һай, иртәрәк тыуһаңсы,
Ат менерлек булһаңсы,
Күп йыл яуҙа йонсоған
Атаңа терәк булһаңсы", -
Тиеп мине бәпләйҙер,
Үҙе һыҡтап илайҙыр;
Мине бала типмелер,
Бер ҙә серен әйтмәйҙер.
Төндә икәү ята инек,

Берәү ишеккә һуҡты,
Ишек селпәрәмә килде, -
Өйгә бер дейеү керҙе,
Әсәйемә ҡул һуҙҙы.
"Илгә ҡыран һалғандың,
Илде тар-мар ҡылғандың,
Таш аттырып ҡая тауға,
Дейеүгә ут һалғандың
Йән һөйгәне Һомаймы?
Уралға Буҙат биреп,
Тау ярҙырған Һомаймы?
Булат ҡылыс тоттороп,
Бар дейеүҙе ҡырҙырып,
Байман тапҡан Һомаймы?
Әйт тиҙерәк, шулаймы?
Хәҙер башың киҫәмен,
Кисеп ҡаның эсәмен;
Кәүҙәң утҡа атамын,
Башың ташлап Уралға,
Уны һалып ҡайғыға
Ярты көсөн аламын", -
Тип, әсәмә уҡталды.
Мине күргәс, туҡталды:
"Урал ҡотонан тыуған
Батыр бала түгелме?" -
Тиеп, үҙе һөйләнде;
Әсәм бер һүҙ әйтәлмәй,
Шомға ҡалып уйланды,
Йәшләндереп күҙҙәрен,
Бигерәк мине ҡыҙғанды.
Үҙем бала тимәнем,
Һис ни уйлап торманым,
Дейеүгә мин ташландым,-
Бер башынан ут сәсте,

Бер башынан ыу сәсте.
Ул бер алды, мин - алдым,
Өҫтөнә менеп атландым.
Ҡулымда һуҡҡы юҡ ине,
Тас яланғас ҡул ине;
Шулай ҙа көс бирмәнем,
Дейеүгә юл ҡуйманым,
Тубарлата башланым.
Ҡыҫып алдым муйынынан,
Ҡан бөркөттөм ауыҙынан,
Тағы өҫтәп бер һуҡтым, -
Албырланы, ҡаҡшаны,
Баҫыр хәле ҡалманы.
Тағы ынтылып бер һуҡтым, -
Тау ҡолатҡандай иттем.
Дейеү ятып йән бирҙе,
Һарай эсе ҡан булды;
Әсәм билдән ҡан кисеп,
Һыуһаның, тип, һыу бирҙе,
Йөҙөнә шатлыҡ тулды.
"Батырҙан батыр тыуғанһың,
Атаңдай батыр булғанһың;
Кәүҙәң бала булһа ла,
Йөрәгең йәш булһа ла,
Инде үҫеп еткәнһең,
Атаң янғыҙ тилмерә,
Ауыр көндәр кисерә,
Атаң янғыҙ булмаһын.
Дошман яуы еңмәһен,
Бар атаңа, юлдаш бул", -
Тип, әсәм димләгән,
Атаһыны эҙләгән
Иҙел тигән улың мин,
Һиңә төбәп килдем мин".

Дүртенсеһе:

"Минең әсәм - Айһылыу,

Атам Шүлгән булғандыр,

Шүлгән һиңә туғандыр,

Дейеүҙәр менән киткәндер,

Аҙаҡ күп ҡан ҡойғандыр;

Яҡшыға дошман булғандыр,

Әсәм барып хур булған,

Ҡайғыһынан һары алған.

Әсәм оҙаҡ түҙмәне,

Мине саҡырып янына

Былай тиеп һөйләне:

"Ҡаранғы төн яҡтыртҡан

Айҙан тыуған бала инем,

Әсәм һөйгән дана инем;

Шүлгәнде кейәү иткәнгә

Әсәм бер йөҙ ҡапланы:

Ҡайғы баҫты йөҙөнө,

Миңдәр баҫты битене.

Көндә йөҙө үҙгәрә,

Нуры кәмеп, хурлана;

Элек көндәш булһа ла,

Ҡояштан ул нурлана.

Атайым да хурланды,

Шүлгәнгә биреп алданды,

Ҡайғыһынан китепме, -

Хәҙер күҙҙән юғалды.

Кейәүгә тигән бүләгем -

Һары толпар бирәйем;

Балам, атҡа мен, тине,

Иҙел менән кит, тине.

Урал атаң юлынан,

Балам, яуға сап, тине,

Һаҡмар батыр бул, тине,

Атаңды эҙләп тап", - тине.